Әлибаев Шәкирйән

атаһы - Ниғмәтйән
инәһе - Шәхмәрүзә

1910 йылда тыуған.

Һуғышҡа тиклем алдынғы колхозсыларҙың береһе булып, төрлө эштәрҙә эшләгән.

Һуғыш башланғас, 1941 йылдың аҙағында совет армияһы сафына алына. Алкино лагерендә әҙерлек үтеп, 1942 йылдың март айында һуғышҡа инә. Оҙайлы һәм катмарлы ҡаты ҡыйыу һуғыш юлдары үтеп 1946 йылда тыуған ауылы - Толыкка ҡайта. Тәүҙә ул колхозда төҙөүселәр бригадаһында бригадир, ә аҙаҡтан уҡып ветфельдшер булып эшләй. 1963 йылдың ҡышында, Стәрлетамак ҡалаһында командировкала ваҡытта, уның гүмере ҡапыл өҙөлә.